Башҡортостан Республикаһы
Ҡырмыҫҡалы районы муниципаль район
2- һанлы Ҡырмыҫҡалы муниципаль дөйөм белем биреү бюджет учреждениеһы
урта дөйөм белем биреү мәктәбенең филиалы
Иҫке Бәпес урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Ҡаралған	Килешелгән	Раҫлайым
ММБ ултырышында	Филиал етәксеһе	Мәктәп директоры
/Абдуллин А.Н./	/Абдуллин Р.Ф. /	/Климкин М.Н./
Протокол № 1 27.08.2015 й.	28.08.2015 й.	Бойорок №130 29.08.2015 й.

Башҡорт теленән

2015-2016 уҡыу йылына

эш программаһы

8-се - 9-сы класс

Төҙөүсеһе Абдуллина Л.Ш.

Иҫке Бәпес ауылы
2015

Филиал муниципального общеобразовательного бюджетного учреждения средняя общеобразовательная школа №2 с. Кармаскалы муниципального района Кармаскалинский район Республики Башкортостан
средняя общеобразовательная школа д.Старобабичево

РАССМОТРЕНО	**СОГЛАСОВАНО**	**УТВЕРЖДАЮ**
на заседании ШМО	Заведующий филиалом	Директор школы
/Абдуллин А.Н./	/Абдуллин Р.Ф. /	/Каримкин М.Н./
Протокол № 1 от 27.08.2015 г.	28.08. 2015 г.	Приказ № 130 от 29.08.2015 г.

Рабочая программа

по башкирскому языку

классы 8 – 9

на 2015-2016 учебный год

Составитель Абдуллина Л. Ш.

д.Старобабичево
2015

1.Аңлатма яҙыу.

Эш программаһы

1. Рәсәй Федерацияһы мәғариф һәм фән министрлығының ”Башланғыс дөйөм белем,төп дөйөм һәм урта (тулы)дөйөм белем биреү федераль дәүләт стандарттарының федераль компонентын раҫлау тураһында”, 2004 йылдың 1089- сы һанлы бойороғо;
2. Рәсәй Федерацияһының 29.12.2012 йылғы №273- ФЗ бүлегендәге «Мәғариф тураһында» законы,
3. «Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» законы, 25.10.1991 й. № 1807- I
4. «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» 1999 йылдың 15 февралендәге 216 –3 һанлы БР- һы Законы(«Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» законына үҙгәрештәр индереү тураһында , 28.03.2014 й. №75 –3)
5. “Башҡортостан Республикаһында Мәғариф тураһында” БР-һы 2013 йылдың 1 июлендәге 696-3 һанлы законы;
6. Башҡорт теленән программалар (5-11-се кластар өсөн) – Ижевск: КнигоГрад, 2008. (Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан тәҡдим ителде)
7. 2- һанлы Ҡырмыҫҡалы муниципаль дөйөм белем биреү бюджет учреждениеһы урта дөйөм белем биреү мәктәбенең белем биреү программаһы,
8. 2- һанлы Ҡырмыҫҡалы муниципаль дөйөм белем биреү бюджет учреждениеһы урта дөйөм белем биреү мәктәбе филиалы Иҫке Бәпес урта дөйөм белем биреү мәктәбенең 2015-2016 уҡыу йылына уҡыу планы;
9. 2- һанлы Ҡырмыҫҡалы муниципаль дөйөм белем биреү бюджет учреждениеһы урта дөйөм белем биреү мәктәбенең 2015-2016 уҡыу йылына йыллыҡ-календарь графигы планы нигеҙендә төҙөлдө.

Эш программаһы 8 - се- 9- сы кластар өсөн 1 йыл иҫәбенә төҙөлдө.

“Башҡорт теле” предметының концепцияһы

Башҡорт теле предметы дөйөм белем биреү мәктәбенең предметтар системаһында донъяны танып-белеү һәм социомәҙәниәт маҡсаттарын тормошҡа ашыра. Донъяны танып-белеү маҡсаттары уҡыусыларҙы тел тураһындағы фәндең төп нигеҙҙәре менән таныштырыуҙы һәм уның менән бәйләп уларҙың билдә-символдар ярҙамында ҡабул итеүен, логик фекерләүен, күҙ алдына килтерә алыуын формалаштырыуҙы аңлата.Башҡорт телен өйрәнеүҙең социомәҙәни маҡсаттары кешенең дөйөм мәҙәнилеге үҫеше күрһәткесе булараҡ уҡыусының коммуникатив компетенцияһын, һөйләү һәм яҙма телмәр үҫешен үҙ эсенә ала.

Төп мәктәптә башҡорт телен уҡытыу маҡсаттары:

1. туған телгә һөйөү, мәҙәниәт күренеше булараҡ, уға ҡарата аңлы ҡараш тәрбиәләү, туған телдең төп аралашыу,кеше эшмәкәрлегенең төрлө сфераһынан белем алыу ҡоралы булыуын, йәмғиәттә ҡабул ителгән әхләҡ-этик нормаларҙы үҙләштереү сараһы, туған телдең эстетик ҡиммәте булыуын аңлау;
2. көндәлек тормошта һәм уҡыу эшмәкәрлегендә туған телдең аралашыу сараһы булараҡ үҙләштереү, үҙ-ара аңлашыу һәм үҙ-ара фекер алышыуға әҙер һәм һәләтле булыуыбыҙҙы үҫтереү, үҙ телмәреңде камиллаштырыу, мөһим төп уҡыу белемен һәм универсаль уҡыу хәрәкәттәре (эшмәкәрлектең маҡсаттарын аныҡ итеп әйтә белеү, уны планлаштырыу, библиографик эҙләнеү үткәреү, төрлө типтағы лингвистик һүҙлектәрҙән һәм сығанаҡтарҙан киң мәғлүмәт

саралары һәм Интернеттан тейешле мәғлүмәтте алыу һәм эшкәртеү; тексты мәғлүмәти эшкәртеүҙе һ.б.);

3. тел системаһының төҙөлөшө һәм уның хәрәкәттә булыу законлығын үҙләштереү, стилистик ресурстар һәм төп әҙәби тел нормаларын күҙәтергә өйрәнеү; анализлау, сағыштырыу, классификациялау һәм тел фактторын баһалау һәләттәрен үҫтереү; яҙыу һәм һөйләү телмәрен, телмәр эшмәкәрлеге төрҙәрен, аралашыуҙың төрлө ситуацияларында телде ҡулланыу ҡағиҙәләрен, телмәр этикет нормаларын, актив һәм потенциаль һүҙлек запасын байытыу; телмәрҙә грамматик сараларҙы ҡулланыу күләмен киңәйтеү: алынған белемде, күнекмәне аралашыу процесында уҡыу эшмәкәрлегендә һәм көндәлек тормошта ҡулланыу һәләтлеген камиллаштырыу.

2.Уҡыу предметына дөйөм характеристика

Башҡорт теле - башҡорт халҡының туған теле, Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле.Туған телдең предмет-ара белем биреү функцияһын «Башҡорт теле» предметының мәктәптә белем алыу процесында баланың шәхес булып формалашыуына предметтың универсаль, дөйөм характеры билдәләй. Башҡорт теле баланың фекер үҫешенең нигеҙе булып тора, уҡыусыларҙың интеллектуаль һәм ижади һәләттәренең үҫеше; үҙ-үҙен тормошҡа ашырыуҙың нигеҙе, яңы белем һәм күнекмәләрҙе үҙаллы үҙләштереү һәләттәрен үҫтереү, шулай уҡ уҡыу эшмәкәрлеген ойоштороу. Туған тел башҡорт мәҙәниәтен һәм әҙәбиәтенең рухи байлығын үҙләштереү сараһы булып тора. Киләсәктә төрлө белемде үҙләштереү һәм һаҡлау формаһы булараҡ башҡорт теле бөтә предметтар менән тығыҙ бәйләнештә тора һәм профессиональ күнекмәләрҙе үҙләштереү сифатына йоғонто яһай. Аралашыуға өйрәнеү, аралашыу процесында уңыштарға өлгәшеү, юғары профессиональ һәм социаль активлыҡ шәхестең тормоштоң төрлө өлкәләрендә өлгәшелгән уңыштарын билдәләүсе характеристикаһы булып тора. Туған тел баланың төрлө тормош ситуацияларында тәрбиә-этик нормаларының нигеҙе булып, әхләҡ нормалар позицияһынан сығып үҙҡылыҡтарына дәлилле баһа биреү мөмкинлеген үҫтерә.

Төп мәктәптә башҡорт теле курсының йөкмәткеһе белем биреү процесында метапредметлы һәм предметлы уҡытыуҙың маҡсаттарына өлгәшеүгә йүнәлдерелгән. Был, үҙ йәһәтендә, коммуникатив, тел, лингвистик һәм мәҙәни компетенцияны формалаштырыуҙы һәм үҫтереүҙе күҙ уңында тота.

Коммуникатив компетенция телмәр эшмәкәрлегенең төрҙәре, һөйләү һәм яҙма телмәр төрҙәрен үҙләштереүҙе иҫәптә тота, телде төп белем һәм күнекмәләрҙе кәрәкле ситуацияларҙа һәм үҙ йәштәрендә тейешле мөһим ситуацияларҙа ҡуллана алыу. Коммуникатив компетенция коммуникацияның маҡсатын билдәләй белеүҙә, телмәр ситуацияһын баһалай белеү, аралашыусының коммуникация ысулдарын һәм ниәттәрен иҫәпкә алыу, стратегик адекват аралашыуҙы һайлауҙы һәм үҙ телмәреңде аңлы рәүештә үҙгәртеүгә әҙер булыуҙы күҙ уңында тота.

Тел һәм лингвистик компетенция тамға системаһы һәм йәмғиәт күренеше булараҡ тел тураһында тейешле белемде үҙләштереү нигеҙендә уның төҙөлөшөн, үҫешен, хәрәкәттәбулыуын формалаштырыуҙы аңлата; башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын үҙләштереү; һүҙлек запасын һәм уҡыусы телмәренең грамматик төҙөлөшөн байытыу; фән булараҡ лингвистика тураһында тейешле белем, уның төп бүлектәре һәм аңлатмаларына кәрәкле булған тел күренешен һәм фактторын анализлау һәм баһалау мөмкинлеге формалаштырыу; төрлө лингвистик һүҙлектәр менән ҡуллана белеү.

Мәҙәни компетенция туған телдең мәҙәни культураны сағылдырыусы форма буларак, аңлауҙы күҙ уңында тота, тел һәм халыҡ тарихының бәйләнештә булыуын, башҡорт теленең милли-мәҙәни үҙенсәлеген аңлау, башҡорт телмәр этикетнормаларын үҙләштереү, халыҡ-ара аралашыу мәҙәниәтен үҙләштереү; милли мәҙәни компонентлы һүҙҙәр мәғәнәһен аңлатыу.

3.Предметтың уҡыу планындағы урыны

Милли- региональ компонентҡа бүленгән сәғәттәр иҫәбенән 8- се- 9- сы кластарға башҡорт теленә 104 сәғәт бүленә: 8- се класта аҙнаһына 2 сәғәттән -70, 9- сы класта аҙнаһына 1 сәғәттән 34 сәғәт тура килә.

4.Уҡыусыларының телмәр күнекмәләренә талаптар

-төрлө тип һөйләмдәрҙә тыныш билдәләрен ҡуя беле;
- һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәрен айыра белеү; (эйә,хәбәр, аныҡлаусы,тултырыусы,хәлдәр)
- тиң киҫәкле һөйләмдәр;
- ике һәм бер составлы һөйләмдәр; бер составлы һөйләмдәрҙең төрҙәре;
- тулы һәм кәм һөйләмдәр;һөйләмдең айырымланған эйәрсән киҫәктәре;
- һөйләм киҫәктәре менән грамматик бәйләнеше булмаған һүҙҙәр; өндәш һүҙҙәр,инеш һүҙҙәр,инеш һөйләмдәр.
- тура һәм ситләтелгән телмәр.
- тыныш билдәләренең дөрөҫ ҡуйылышын ныҡытыу маҡсатында ижади эштәр:
-изложениелар, иншалар, диктанттар яҙыу.
- ҡушма һөйләмдәр; эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр.
- эйәрсән һөйләм төрҙәре; күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр; ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр;
-теҙемдәр;
-телмәр стилдәрен айыра белеү һәм уларҙың стиль һыҙаттарын билдәләй алыу;
- синтаксик- стилистик күнегеүҙәр башҡарыу.
-эш ҡағыҙҙарын төҙөү һәм ҡулланыу күнекмәләрен үҫтереү.

5.Уҡыу курсының йөкмәткеһе

Беренсе йөкмәткеле йүнәлеш: «Телмәр һәм аралашыу телмәре», «Телмәр эшмәкәрлеге», «Текст», «Телдең функциональ төрлөлөгө».

Икенсе йөкмәткеле йүнәлеш: «Тел тураһында дөйөм белешмә», «Фонетика һәм орфоэпия», «Графика», «Морфемика һәм һүҙьяһалыш», «Лексикология һәм фразеология»,«Морфология», «Синтаксис», «Телмәр мәҙәниәте», «Дөрөҫ яҙыу:орфография һәм пунктуация».

Өсөнсө йөкмәткеле йүнәлеш:"Тел һәм мәҙәниәт", уны өйрәнеү телдең тарих һәм халыҡтың мәҙәниәте бәйләнештә булыуын асыҡларға ярҙам итәсәк.

Уҡыу процесында күрһәтелгән йөкмәткеле йүнәлештәр бер-береһе менән тығыҙ бәйләнештә һәм интеграцияланған. Һәр бер бүлекте өйрәнеүҙә уҡыусылар тейешле белем алып һәм күнекмәләр үҙләштереп кенә ҡалмай, ә телмәр эшмәкәрлек төрҙәрен камиллаштыра, төрлө коммуникатив күнекмәләрҙе үҫтерә, туған тел тураһында белемдәрен тәрәнәйтә.Туған телдә белем алыу процесында баланың шәхесе формалаша,фекере үҫешә, белем һәм күнекмәләрҙе үҙ аллы үҙләштереү һәләттәре үҫтерелә, шулай уҡ ул уҡыу эшмәкәрлеген ойошторорға өйрәнә.

8- се класс башҡорт теле

Синтаксис буйынса ике составлы һөйләмдәрҙе, тиң киҫәкле һөйләмдәрҙе, айырымланған эйәрсәнкиҫәкле һөйләмдәрҙе ҡабатлау (4 сәғәт)

Теҙмә ҡушма һөйләмдәр (10 сәғәт)+ 3 сәғәт(ҡушма һөйләмде ҡабатлау)

I.Теркәүечеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә, уларҙа тыныш билдәләре. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә; уларҙа тыныш билдәләре.

II.Теркәүесле һәм теркәүечеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу, уларҙы һөйләү һәм яҙма телмәрҙә ҡулланыу күнекмәләрен үҫтереү; ул төр ҡушма һөйләмдәргә синтаксик төпсөү яһай белеү.

Предмет эсендәге бәйләнеш. Башҡорт теле (V класс). Синтаксис һәм пунктуация. Ике баш киҫәге лә булған ябай һөйләмдәрҙән торған теркәүесле ҡушма һөйләмдәр. Ул төр ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.Предмет-ара бәйләнеш. Рус теле (V класс). Синтаксис һәм пунктуация. Теркәүесле ҡушма һөйләмдәр, уларҙа тыныш билдәләре.

Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр (20 сәғәт)

I.Баш һәм эйәрсән һөйләмдәр. Эйәрсән һөйләмдәрҙең баш һөйләмгә бәйләнеп килеү ысулдары: 1) теркәүестәр, 2) бәйләүестәр, 3) килеш ялғауҙары, 4) интонация, 5) мөнәсәбәт һүҙҙәр.

Эйәрсән һөйләмдәрҙең төрҙәре, улар эргәһендә тыныш билдәләре; эйә, хәбәр, аныҡлаусы, тултырыусы эйәрсән һөйләмдәр. Хәл һөйләмдәр: ваҡыт, урын, рәүеш, күләм-дәрәжә, маҡсат, сәбәп, шарт һәм кире эйәрсән һөйләмдәр.

Хәл эйәрсән һөйләмдәренең хәл әйтемләренән айырмаһы (практик планда).

Һөйләм киҫәктәрен, айырымланған эйәрсән киҫәктәрҙе, хәл әйтемдәрен, эйәрсән һөйләмдәрҙе, теркәүечеҙ һәм теркәүесле ҡушма һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу, уларҙы телмәрҙә стилистик маҡсатта ҡулланыу күнекмәләре. Ҡушма һөйләмдәргә телдән һәм яҙып синтаксик һәм пунктуацион төпсөү күнекмәһен үҫтереү.

II.Предмет эсендәге бәйләнеш. Башҡорт теле (VII класс). Айырымланған эйәрсән киҫәкле һөйләмдәр. Айырымланыу тураһында төшөнсә. Айырымланған эйәрсән киҫәкле һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.

Предмет-ара бәйләнеш. Рус теле (VII класс). Айырымланған эйәрсән киҫәкле һөйләмдәр. Сифаттан, сифат ҡылымдан килгән аныҡлаусыларҙың айырымланыуы. Айырымланған эйәрсән киҫәкле һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.

Ҡушма һөйләм бүлеге буйынса үтелгәндәрҙе йомғаҡлау һәм тәртипкә һалыу.

Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр (8 сәғәт)

I.Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм
төшөнсә. Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.

Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә. Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. Теҙем тураһында дөйөм төшөнсә. Уларҙың стилистик роле.

II.Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләрҙе дөрөҫ интонация менән
уҡыу күнекмәһе; шул уҡ тип һөйләмдәрҙе һөйләү һәм яҙма
телмәрҙә ҡулланыу күнекмәһен үҫтереү.

Предмет-ара бәйләнеш. Рус теле (VIII класс). Бер нисә эйәрсән һөйләмле эйәртеүле һөйләмдәр. Эйәрсән һөйләмдәрҙең баш һөйләмгә бәйләнеү ысулдары; бер баш һөйләмгә бер төрлө бер нисә эйәрсән һөйләмдең бәйләнеүе, бер баш һөйләмгә төрлө юл менән бәйләнгән бер нисә эйәрсән һөйләм.

Синтаксик һәм пунктуация буйынса ике составлы тарҡау ябай, бер нисә ябай һөйләмле ҡушма һөйләмдәр, ҡатмарлы һөйләм төҙөлмәләренән күп эйәрсәнле эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр, ҡатнаш ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре тураһында ҡабатлау (3 сәғәт).

Уҡытыусы уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып, V—VIII кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау ойоштора (1 сәғәт).
Яҙма эштәр-19 с., ҡабатлау -2 сәғәт

Башҡорт теле 9-сы класс

Тел тураһында дөйөм төшөнсә (3 сәғәт)
I.Йәмғиәт тормошонда телдең роле. Тел - үҫә барыусы ижтимағи күренеш. Башҡорт теле - башҡорт халҡының милли теле һәм уның башҡа ҡәрҙәш телдәр араһындағы урыны.
Әҙәби тел һәм диалект тураһында дөйөм төшөнсә. Башҡорт теленең диалекттары. Башҡорт әҙәби теле һәм уның үҫеше. Ике теллелек.
II.Әҙәби тел нормаларын таный, уларға ярашлы һөйләй һәм яҙа белеү.
Предмет-ара бәйләнеш. Рус теле (IX класс). Йәмғиәт тормошонда телдең роле. Телдең вазифалары. Тел һәм мәҙәниәт. Башҡорт теле менән рус теле - беҙҙең республика халыҡтары тормошонда. Әҙәби тел һәм күркәм (художестволы) әҙәбиәт теле.
Башҡорт әҙәби теленең стилдәре (7 сәғәт)
I.Стилистика тураһында дөйөм төшөнсә. Әҙәби телдең стилдәре: йәнле һөйләү стиле, фәнни, рәсми (эш ҡағыҙҙары), эпистоляр (хаттар), публицистик стилдәр, күркәм (художестволы) әҙәбиәт стиле. Уларҙың төп үҙенсәлектәре.
Һүрәтләү саралары - күркәм (художестволы) әҙәбиәт стиле саралары. Лексик һәм грамматик синонимдар.
II.Төрлө стилгә ҡараған текстар һайларға өйрәтеү. Стилистик яҡтан төҙәк һәм хаталы текстарҙы сағыштырып, уларға стилистик анализ яһарға өйрәтеү. (Уның өсөн газета, журналдарҙағы мәҡәләләрҙең стиль төрөн, әҙәби әҫәрҙәрҙең стиль үҙенсәлеген билдәләтеү, уларға стилистик төпсөү яһау эштәрен ойоштороу). Башҡорт теленән руссаға, руссанан башҡортсаға тәржемәләр яһатыу. Башҡортса һәм русса һөйләмдәрҙә һүҙҙәр тәртибен сағыштырыу, үтелгән эштәргә таянып, һығымта яһатыу.
Телмәр төҙөгәндә, стилистик маҡсатты күҙ уңында тотоп, синоним һүҙҙәрҙе, морфологик, синтаксик синонимдарҙы дөрөҫ һайларға һәм ҡулланырға өйрәтеү. (Уның өсөн проза һәм поэтик әҫәрҙәрҙә һөйләм киҫәктәренең урынлашыу тәртибендәге үҙенсәлектәрҙе, уларҙың стилистик ролен билдәләтеү күнегеүҙәре эшләтеү, проза һәм шиғри әҫәрҙәрҙә һүрәтләү, тасуирлау сараларын таптырыу, уларҙың телмәрҙәге стилистик функцияларын билдәләтеү эштәрен ойоштороу, һүрәтләү
сараларын ҡулланыуҙы талап итеүсе яҙма эштәр үткәреү). Текстарҙан һүрәтләү сараларын таптырыу, һөйләү, яҙма телмәрҙә уларҙы ҡулланырға өйрәтеү.
Һүрәтләү саралары (7сәғәт)
V-IX кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау һәм системаға һалыу.
Фонетика, орфоэпия, орфография (телмәр ағышындағы төрлө фонетик күренештәрҙең, ялғауҙарҙың, ҡушма һүҙҙәрҙең әйтелеше һәм яҙылыш) .
Лексика ,морфология ,синтаксис һәм пунктуация (9 сәғәт)
Тел дәрестәрендә укыусыларҙың төрлө темаларға телдән сығыш яһауҙарын мотлаҡ ойошторорға кәрәк, уны системаға өйләндереү маҡсатҡа ярашлы. Уҡыусыларҙың асыҡ, бәйләнешле һәм йәнле итеп һөйләүҙәренә ирешергә кәрәк.
Яҙма эштәр -9.

6.Тематик пландар

8- се класс– 70 сәғәт

Бүлек атамаһы	Сәғ.һаны	Яҙма эштәр һаны
“Ябай һөйләм синтаксисы” буйынса ҡабатлау	4	1
Ҡушма һөйләм.	13	7
Эйәртеүле ҡушма һөйләм	5	2
Эйәрсән һөйләм төрҙәре.	16	7
Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр	8	3
Ҡабатлау дәрестәре	5	1
Яҙма эштәр барлығы (контроль диктант, инша, изложение,эш ҡағыҙы)	19	19

9- сы класс– 34 сәғәт

Бүлек атамаһы	Сәғ.һаны	Яҙма эштәр һаны
Инеш.Тел тураһында дөйөм төшөнсә	1	1
Әҙәби тел һәм диалект.	2	1
Башҡорт теленең стилдәре.	7	1
Һүрәтләү саралары.	7	3
V- IX кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау	8	3
Яҙма эштәр (контроль диктант,инша, изложение)	9	9

7.Белем биреү процесының материаль-техник яктан тәьмин ителешен һүрәтләү

Төп әҙәбиәт:

1. Ф.Ф. Абдуллина, С.Б. Аҡъюлова. Башҡорт теле: Дөйөм белем биреү учреждениеларының 8-се класы өсөн дәреслек. Өфө : «Китап», 2014.
2. В.Ш. Псәнчин . Әсә теле: Урта мәктәптең 9- сы класы өсөн дәреслек. Өфө: «Китап», 2014
3. Башҡорт теленән программалар (5-11-се кластар өсөн) – Ижевск: КнигоГрад, 2008. (Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан тәҡдим ителде)

Өҫтәмә әҙәбиәт:

1. Башҡортса – русса мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге. – Өфө: Китап, 1994.
2. «Башҡортостан уҡытыусыһы», «Аҡбуҙат», «Аманат» журналдары.
3. Габитова З.М. Примерные программы по башкирскому для 5-9 классов башкирских школ. - Уфа: Китап,2012;

Электрон дәреслектәр һәм интернет ресурстар:

1. Электрон дәреслек «Башҡорт теле - 9- сы класс». - Өфө, 2013.
2. Электрон дәреслек «Башҡорт теле - 8- се класс». - Өфө, 2013.
3. И.Ә Шарапов “Башҡорт теленән тест һорауҙары”

Техник саралар:

1. Ноутбук
2. Проектор
3. Экран

1-се ҡушымта

Яҙма эштәрҙе баһалау.

Контроль диктантты тикшергәндә, түбәндәге хаталар төҙәтелә, ләкин баһалағанда иҫәпкә алынмай:
1) мәктәп программаһына индерелмәгән ҡағиҙәгә яҙылыштар;
2) әле үтелмәгән ҡағиҙәгә яһалған хаталар;
3) автор ҡуйған ҡатмарлы пунктуацияға хаталар;
4) механик рәүештә бер хәреф урынына икенсеһен яҙыу (мәҫәлән: *ата* урынына *аша).*
Диктантҡа билдә ҡуйғанда шулай уҡ хаталарҙың характерына иғтибар итергә кәрәк. Хаталарҙы иҫәпләгәндә тупаҫ булмағандары, йәғни грамоталылыҡты билдәләү өсөн әһәмиәте юҡтары, айырым билдәләнә. Бындай хаталарҙың икеһе берәүгә иҫәпләнә.
Түбәндәге хаталар тупаҫ булмаған хатаға инә:

1) ҡағиҙәләрҙең иҫкәрмәһенә
ҡараған хаталар;
2) бәйләү юлы менән яһалған яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышында хаталар;
3) бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу;
4) үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә ялғауҙар яҙылышында хаталар.

Диктант бер генә билдә менән баһалана. «5» билдәһе — тупаҫ булмаған 1 орфографик, 2 пунктуацион хата булған эшкә, «4» билдәһе 4 орфографик, 3 пунктуацион йә 1 орфографик, 6 пунктуацион, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 5 орфографик хатаһы булған эшкә лә «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин. «3» билдәһе 6 орфографик, 6 пупктуацион йә 3 орфографик, 9 пунктуацион, йә 12 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктуацион хаталы эшкә лә «3» билдәһе ҡуйырға мөмкин. «2» билдәһе 9 орфографик, 9 пунктуацион йә 8 орфографик, 10 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Хата һаны 15 орфографик хатанан да артып китһә,«1» билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.
Әгәр контроль диктанттан һуң өҫтәмә грамматик, орфографик, лексик эштәр тәҡдим ителһә, уларҙың һәр береһе айырым баһалана. Грамматик биремдәрҙе баһалағанда түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алыу тәҡдим ителә: «5» билдәһе бөтә эште лә теүәл йә бер хата булғанда, «4» билдәһе эштең яртыһынан күберәге дөрөҫ эшләнгәндә, «3» билдәһе яртыһынан әҙерәге дөрөҫ эшләнгәндә, «2» билдәһе бер эш тә дөрөҫ эшләнмәгәндә ҡуйыла.
Эште баһалағанда уҡытыусыға түбәндәге таблицала бирелгән критерийҙарға ҡарап эш итеү тәҡдим ителә:

Баһалауҙың төп критерийҙары

билдә	йөкмәткә һәм телмәр	грамоталылыҡ
“5”	1. Эштең йөкмәткеһе темаға тулыһынса тап килә. 2. Фактик хаталар юҡ. 3. Йөкмәткә эҙмә-эҙлекле асыла. 4. Эштең һүҙлеге бай. 5. Стиль һәм мәғәнәүи яҡтан текст камил. Эштә йөкмәткеһе яғынан - 5 һәм телмәр төҙөкләгә яғынан 5 кәмселек булыуы мөмкин.	3 орфографик, 3 пунктуацион йә 4 грамматик хата булыуы мөмкин.
“4”	1. Эштең йөкмәткеһе, нигеҙҙә, темаға тура килә (бер ни ҙиклем ситкә тайпылыштар бар). 2. Йөкмәткә дөрөҫ, ләкин һөйләм төҙөлөшөндә ҡайһы бер фактик хаталар бар. 3. Фекер ебендә бер ни тиклем эҙмә-эҙлелек боҙолған. 4. Ҡайһы бер осраҡта һүҙҙәрҙең ҡулланылышында хата китеүе мөмкин. 5. Эштең стиле ярайһы уҡ төҙөк һәм мәғәнәле. Дөйөм алғанда, эштең йөкмәткеһендә 8 һәм телмәрендә 8 кәмселек булыуы мөмкин.	7 орфографик, 6 пунктуацион йәки 2 орфографик, 13 пунктуацион хата булыуы мөмкин. Шулай уҡ 5 грамматик хата булыуы мөмкин.
“3”	1.Эш теманан байтаҡҡына ситкә тайпылған. 2.Эштең йөкмәткеһе, нигеҙҙә, дөрөҫ, ләкин һөйләм төҙөлөшөндә фактик хаталар байтаҡ. 1.Эҙмә-эҙлелек тулыһынса һаҡланмай, һүҙҙәрҙең ҡулланылышында хаталар бар. 2.Эштә йөкмәткеһе яғынан — 15, телмәре яғынан 15 хата булыуы мөмкин.	10 орфографик, 13 пунктуацион, шулай уҡ 8 грамматик хата булыуы мөмкин.
“2”	1.Эш теманы асмай. 2.Һүҙҙәр ҡулланылышында бик күп фактик хаталар ебәрелгән. 3.Эштең бөтә өлөштәрендә лә фекерҙең эҙмә-эҙлелеге боҙолған, һөйләмдәр үрынлы ҡулланылмаған, бәйләнеш юҡ. 4.Эштең йөкмәткеһендә — 20, телмәрендә 20-нән күберәк хата ебәрелгән.	12—15 орфографик, 10 пунктуацион, 12 грамматик хата.

Башҡорт теленән яҙма эштәрҙең һаны

Контроль эштәрҙе сиректең беренсе көнөндә, сиректең һуңғы аҙнаһында, байрамдан
һуң беренсе көндә, дүшәмбе, йома, шәмбе көндәрендә үткәреү тәҡдим ителмәй.

Башҡорт теленән яҙма эштәр төрө	Кластар			
	8		9	
	өйрәтеү	контроль	өйрәтеү	контроль
Диктант	4	2	1	2
Изложение	4	2	1	1
Инша	4	2	2	2
Эш ҡағыҙҙарының һаны	1		-	
Барлығы	19 сәғәт		9 сәғәт	

Телдең бүлектәрен (темаларҙы үтеүгә бүленгән сәғәттәр һаны)	51 сәғәт	25 сәғәт
Йыллыҡ сәғәттәр һаны	Аҙнаһына 2 сәғәт, бөтәһе 70 сәғәт	Аҙнаһына 1 сәғәт, бөтәһе 34 сәғәт

Диктанттағы һүҙҙәр һаны

Кластар	8	9
Контроль диктант(һүҙ)	130/150	150/160
Һүҙлек диктанты(һүҙ)	30/35	35/40

Диктант бер генә билдә менән баһалана. Контроль эш диктанттан һәм өҫтәмә грамматик, орфографик, лексик эштәрҙән торһа, уларҙың һәр берәһе айырым баһалана.

Изложение һәм иншалағы һүҙҙәр һаны

Кластар	8	9
Изложение(һүҙ) йыл башында/ йыл аҙағында	350/400	400/500
Инша(һүҙ)	300	350
бит	2,5 – 3,5 бит	3,5 - 4,0

Иншаларҙың күләме яҡынса күрһәтелә, сөнки уҡыусы иншаһының күләме уның жанры һәм стиленә, теманың характерына бәйләнгән. Уҡыусының дөйөм үҫеш кимәле, уның яҙыу темпы ла – инша кимәленә йоғонто яһаусы факторҙар. Шулай ҙа иншаның күләме юғарыла күрһәтелгән яҡынса норманан 1,5 тапҡырға(йә унан артығыраҡ) күберәк йә әҙерәк булһа, уҡытыусы баһаны күтәрә йә, киреһенсә, кәметә ала. Изложение һәм иншалар ярҙамында уҡыусыларҙың йөкмәткене аса һәм кәрәкле тел сараларын темаға ярашлы һайлай һәм шулай уҡ уларҙың грамматик нормаларҙы һаҡлап, орфографик ҡағиҙәләрҙе дөрөҫ ҡуллана белеү һәләтлеге тикшерелә. Шуға күрә һәр инша һәм изложение ике билдә менән баһалана: беренсе билдә эштең йөкмәткеһе һәм теле өсөн ҡуйылһа, икенсеһе грамоталылыҡ кимәлен билдәләй.

Башҡортостан Республикаһы
Ҡырмыҫҡалы районы муниципаль район
2- һанлы Ҡырмыҫҡалы муниципаль дөйөм белем биреү бюджет учреждениеһы
урта дөйөм белем биреү мәктәбенең филиалы
Иҫке Бәпес урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Ҡаралған	Килешелгән	Раҫлайым
ММБ ултырышында	Филиал етәксеһе	Мәктәп директоры
/Абдуллин А.Н./	/Абдуллин Р.Ф. /	/Ҡаҙымкин М.Н./
Протокол № 1 27.08.2015 й.	28.08.2015 й.	Бойорок №130 29.08.2015 й.

Башҡорт теленән

8-се - 9-сы кластар өсөн

2015-2016 уҡыу йылына

контроль-баһалау материалдары

Төҙөүсеһе Абдуллина Л. Ш.

Иҫке Бәпес ауылы
2015

2-се ҡушымта

8-се класс өсөн диктант һәм изложение текстары

Контроль диктант.
Яугир менән ат.

Һуғышта ҡатнашҡан һыбайлы һәм яугир яҡшы белә: атының ҡаты яраланып, ҡан һауған эсен тырҡылдатып, йән бирә алмай ятыуын күреүҙән дә ауыр йөрәк ғазабы юҡтыр. Тик хәҙерге киноларҙа ғына кавалерист, әгәр аты яраланып ауһа, һә тигәнсе пистолетын сығара ла уға мөлдөрәп текләгән, күҙҙәренән соборлатып йәш ағыҙып ятҡан атының маңлайына терәп ата ла китә. Дөрөҫ түгел был, дөрөҫ түгел! Быға ышанмағыҙ! Һуғышҡа үҙең менән тире һеңешкән башын һәр саҡ яурыныңа һалып, бер ҡарағанда йәшкелт, ә икенсе ҡарағанда муйыл кеүек сөм ҡара күҙҙәре менән һиңә йәнтәслим бирелгәнлеген тик әйтә генә алмай текләп торған, мең ғаләм араһында һине бер кем менән дә бутамай, үҙәге өҙөләп көткән атыңды үҙ ҡулың менән атып китеү — үҙеңдең йән дуҫыңды атып үлтереү менән бер ул. *(Р. Өмөтбаев.)*

Биремле диктант.
Әсәйем юлға сыға.

Һуғыш ваҡыты. Атайым фронтта фашистарҙы туҡмап йөрөй, әсәйем колхозда эшләй ине. Бер саҡ әсәйем, Яҡуп ағайҙың артлы санаһын егеп, Тимертауҙағы өләсәйемде ҡунаҡҡа алып килде. Өләсәй бер-ике кис ҡунғайны инде, әсәйем ҡайҙалыр китергә йыйына башланы.

Әсәйем өндәшмәй. Бер аҙҙан һуң ул сөйҙәге тунын алып кейә, аҡ ҡалын шәлен бәйләй, ә өләсәй уға тоғоноң биштәрен кейергә булыша. Шунан беҙ өсөбөҙ ҙә ултырғыстарға ултырабыҙ: юлға сығырҙан алда шулай итәләр бит. Шунан әсәйем ҡапыл урынынан тора, башта өләсәйҙе, унан һуң мине ҡосаҡлап ала. Тышта ҡыш. үҙе төн, ә ул алыҫ юлға сыға. Әсәйем, тиҙ-тиҙ генә атлап, ишеккә бара. Ул тағы беҙгә боролоп ҡарай ҙа: «Хушығыҙ!» — тип өй ишеген аса. Бына ул ҡураға сыҡты, ә мин уның аяҡ тауыштарын ишетәм. Әсәйем ҡапҡаны асып япты — инде урамда ҡар шығырлай.Тауышы алыҫая һәм аҡрыная бара: шығыр... шығыр…
шығыр...

Мин, йүгереп килеп, өләсәйгә һыйынам, ул минең башымдан һыйпай.

— Һинең һеңлең булһа, яратыр иненме? — тип һорай ул.

— Би-и-ик яратыр инем! *(М. Кәрим.)*

Эш. Теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙе табырға, уларҙың составын билдәләп, анализ яһарға.

Һайланма диктант.
Ҡушма һөйләмдәрҙе һәм хәл әйтеме булған һөйләмдәрҙе һайлап яҙырға.

Ат яратыу.

Ауылдарҙа үткәрелә торған һабантуйҙарҙа ат сабыштары, мәңге юйылмаҫ- лыҡ булып, кемдәрҙең күңел төбөндә уйылып ҡалманы икән! «Фәлән ауылда фәләнсә көндә һабантуй үткәрелә», — тигән хәбәр ишетелгәс тә, йөрөк аты булған кешеләрҙең йөрәгенә ут ҡабына, ул йоҡоһонан яҙа. Улар үҙ аттарын сабышҡа әҙерләй башлайҙар. Уны «ат яратыу» тиерҙәр ине. Ләкин уның үҙ атын яратыуын бер әҙәм дә белергә тейеш түгел. Сит кеше күҙе тейһә, атыңдан өмөтөңдө өҙ — ул йә иң артта килә, йә яман сиргә һабыша.

Хужа үҙ атын ҡояш ҡалҡырҙан алда, күрше- тирә ҡуҙғала башлағансы йөрөтә, ә кисен, ҡояш байығас, донъя һил булғас алып сыға. Ат йөрөтөү теләһә кемгә ышанып тапшырылмай : һабантуйҙа ул атҡа кем атланып сабырға тейеш, шул малай йөрөтә.

Башта, унар саҡрымға ебәреп, ат аҡ күбеккә төшкәнсе ҡыуалар ҙа бер нисә көн таң ашырып алалар. Был инде атты таң аткансы ашатмай тороу тигән һүҙ. Шунан һуң ғына ҡоро бесән бирәләр. Аттың ауырлығы артмаһын өсөн, йәш бесән биреү ҡәтғи тыйыла.

Атты эсереү ҙә етди нормаға һалына: башта — бер юлы ике биҙрә, бер аҙна үткәс — берәр биҙрә һыу үрелә; ә инде ат сабышыуға бер аҙна ваҡыт ҡалғас, һыу ярты биҙрәгә ҡала. Ат йонсоп китмәһен өсөн, алдынан һоло өҙмәйҙәр.

(Р. Өмөтбаев.)

Иҫкәртмәле диктант.
Яҙ башланды.

Ҡыш нисек кенәә ҡарышмаһын, яҙ әкренләп булһа ла уны еңә. Иртәле- кисле һыуыҡ бөтә ерҙе туңдырһа ла , көндөҙ, ҡояш күтәрелгәс, көн бермә- бер йылына. Тәбиғәт күренеше һаман үҙгәрә, көндән-көн яңынан- яңы төҫ ала, биҙәлә. Әлегәсә ап-аҡ булып ятҡан тау баштары ҡарая. Урман да элекке кеүек тыныс түгел хәҙер — яланғас ағастар бөрөләнеп япраҡ ярырға әҙерләнә. Яҙҙың тәүге йылыһына шатланып, ҡоштар оса. Ҡарабаш турғайҙар сырҡылдаша, сыйырсыҡтар сырылдаша, күк йөҙөн иңләп осҡан ваҡ-ваҡ ҡына ҡоштар өйөрө, бөтәһе бер юлы сыр- сыу килеп, юғары күтәреләләр ҙә, яңынан түбән төшөп, ҡыуаҡлыҡтар эсендә юғалалар. Ғүмер буйы кәйефһеҙ күренгән тау сәпсектәре лә, туй көнө яҡынлашҡанын һиҙеп, сикһеҙ шатланалар. Уралда ҡышлаған ҙур аҡ өкө генә төньяҡҡа китергә ҡабаланмай, яҙғы ҡояш йылыһына иғтибар ҙа итмәй, эргәһендәге сыбар ҡоштоң ҡарлыҡҡан тауышын тыңлай.

Тиҙҙән ҡар бөтөнләй ireп бөтөр, боҙҙан ҡотолған йылғалар шаулап ағыр, тау итәктәрендә умырзая ҡалҡыр, ер өҫтө йәшел үләндәр менән ҡапланыр.

(Я. Хамматов)

Контроль диктант.
Күңелле ине ул саҡтар.

Әсәһе сәләмәт саҡта, ҡайһылай күңелле ине! Улар ял көндәрендә Дим буйына сыға торғайнылар. Иртәнсәк тымыҡ урамдар буйлап, селәүсен тултырылған ҡалай банка тоткан һәм, мылтыҡлы һалдат һымаҡ ҡармаҡ һаптарын иңбашына һалған Сәлих иң алдан бара; уның артынан биҙрә күтәргән әсәһе килә: иң арттан, йоҡоһо асылып етмәгән Рәшиҙәне елкәһенә атландырып, атаһы атлай.

Өфө ултырған тауҙан һоҡланғыс күренеш асыла: тау аҫтында Ағиҙел тын ғына ағып ята; уға һалынған тимер күпер аша, төтөнөн аҡ шарфтай елберләтеп, поезд сығып бара; күперҙән бер ни тиклем үрҙәрәк Ағиҙелгә тымыҡ Дим килеп ҡушыла; ә йылға аръяғында күҙ иңләмәҫ яландар һәм урмандар. Тиҙерәк шул урмандарға! Һәм Сәлих тау аҫтына йүгереп төшөп китә.

Дим буйында улар балыҡ тоталар, тәмле балыҡ һурпаһы бешерәләр, һыу керәләр, ҡомға ятып, ҡояшта ҡыҙыналар, туйғансы йоҡлайҙар һәм кисен генә күҙ бәйләнер алдынан ғына, өйгә ҡайталар ине.

Ә хәҙер Сәлих бер ҡайҙа ла сыға алмай: ауырыу әсәһен, өс йәшлек һеңлеһе Рәшиҙәне ҡарар кеше юҡ. *(Х. Мохтар.)*

Өйрәтеү изложениеһы

Батырҙың бала сағы

Юлай Аҙналин үҙенең зирәклеге һәм тотҡан урыны менән бик күренекле кеше булған. Ул волость старшинаһы булып торған. Урындағы властар башҡорт старшинаһына ышаныу менән ҡараған дар. Уның рус хөкүмәтенә бирелгән һәм тоғро икәненә бер ниндәй ҙә шик булмаған. Бына шуға күрә, булып торған сыуалыштарға һәм эҙәрләүҙәргә ҡарамаҫтан, Юлай үҙ урынында имен генә ҡала килгән. Ләкин башҡорт старшинаһы ысынында бер ҙә ундай булмаған, ә үҙен ана шундай оҫта күрһәтә белгән. Юлай күҙе алдында башҡорт ауылдары яндырыла, край бөлгөнлөккә төшөрөлә. Үҙ тыуған илен ҡайнар һөйгән Юлай тыныс күңелле тамашасы булып ҡына ҡала алмай; ул эстән ризаһыҙлыҡ һаҡлай һәм үс тота.

Һөйөнөслө ата һәм әсәһенең шатлыҡлы йылмайыуҙары менән бергә, янып ятҡан ауылдарҙың ҡан һымаҡ ҡыҙыллығы тәбрик иткән Салауаттың тыуыуын. Ғаилә һәм тәбиғәт уның тәрбиәсеһе булалар. Шулар йоғонтоһонда уның көсө, һәләте үҫә һәм буласаҡ геройҙың характеры һалына. Өйҙә ул әсәһенән ҡайғылы йырҙар һәм атаһынан халыҡтың яфалы тормошо тураһында хикәйәләр тыңлай; йәй көндәрендә йәйләүҙә йөрөгәндә лә, шундай уҡ хикәйәләр, батырҙар һәм бөйөк кешеләр тураһындағы йырҙар һәм легендалар ишетә.

Тиҙ тәьсирләнеүсән, дәртле һәм шиғри рухлы Салауат һәр нәмәгә ҡолаҡ һала, һәр кемгә ҡарата үҙ фекерен белдерә, туған тәбиғәттең матурлығына һоҡлана.

Салауат үҙенең әсәһен бик ярата һәм атаһын да бин яҡын күрә: уның артынан ҡалмай тип әйтерлек, атаһы ҡайҙа бармаһын, улы гел уның менән.

Салауат, юлға яҡын ерҙә күренеп ятҡан күмер өйөмөнә күрһәтеп:

— Атай, анау ҡара нимә ул?— тип һорай.

— Унда элек ауыл ине,— ти Юлай.— һин тыуған көндө яндырҙылар.

Улы, белергә тырышып:

— Ә ниңә яндырҙылар?— тип һорай.

— Беҙҙекеләр ирек яҡлы булдылар... Шуның әсән яндырҙылар.

Малайҙың йөҙө ҡапыл ҡыҙарып китә, күҙҙәре ут кеүек йылтырай.

— Ә бына бында,— тип күрһәтә атаһы, шундай уҡ яндырылған ауылды үтеп барғанда,— беҙҙекеләрҙең баштарын балта менән сабып өҙҙөләр, ә ҡайһыларын аҫтылар...

Малайҙың йөҙө үҙгәрә. Ул, тынысһыҙланып, эйәре өҫтөндә борғолана, үҙе бер һүҙ ҙә өндәшмәй, тик атаһына ғына ҡарай.

— Эйе, улым, башҡорт ҡаны күп ҡойолдо, күп... Ә күпме әсәләрҙе һәм балаларҙы ҡол итеп алып киттеләр!.. Хәҙер ҙә шул... Ҡара әле бында! Күрәһеңме урман өҫтөндәге төтөндө? Унда завод бар. Беҙҙең ергә ҡоролған. Ул ерҙе тартып алдылар, һин беләһеңме шуны?

— Тартып алдылар?

— Эйе... Купец Твердышев.

— Ә һин уны ҡыуып ебәрмәнеңме?— тип һорай Салауат асыу менән, һәм үҙе, уҡлы һаҙаҡҡа тотона биреп:— О, үҙем тиҙерәк үҫһәм ине!— ти.

Салауат уҡырға йөрөгән мәктәп үҫмерҙең аҡылын һом тойғоларын йүнәлешле үҫергә ярҙам итә... Бына ниндәй ерлектә үҫкән был ҡыр сәскәһе.

Ф. Нефедовтан.

Контроль изложение

Һунарға барыу.

Көнсығыш як зәңгәрһыуланып яктыра башлағанда Әбделнәғим бабай менән ауылға каршы ғына торған һыртка менеп бара инек инде. Минең яурында әлеге шул бабайымдың кушкөбәге, ә Әбделнәғим бабай ашамлык һалынған токсайҙы артмаклап алған, билбауына балтаһын кыстырған. Уның кулында минеке шикелле саңғы таяғы түгел — еңел генә ағас көрәк. Беҙ шулай итеп, һунарға сығып киттек. Ә беҙҙең ниндәй һунарға китеп барғанды беләһегеҙме һуң? һыуһарға! Иң шаян, иң матур үҙенә күрә иң уҫал йәнлекте ауларға. Ә бына мылтын Әбделнәғим бабай һыуһарға йөрөгәндә, башка тура килә калһа тип кенә ала. Һыуһарҙы атып алмаймы ни, тип аптырарһығыҙ әле тағы ла. Бик һирәк кенә атырға тура килә уны. Һыуһар аулағанда иң кәрәге балта менән көрәк. Ошо коралдар булдымы, Әбделнәғим бабайҙың кулынан осраған бер һыуһар ыскына алмай.

Яманташ һыртынан шыуып төштөк тә, бер ҙур ғына яланды үткәс, йүкә, уҫак, катнаш имән урманына индек.

Хәҙер инде беҙ, һәр нәмәгә иғтибар итеп, әкрен генә бара башлайбыҙ. Әбделнәғим бабай кар өҫтөндә һәр бер эҙҙе генә түгел, яңы һынып төшкән кыу ағас ботактарын да ентекләп карай. Бына ул бер йыуан ғына йүкә төбөнә тукталды.

Аптырарһың был Әбделнәғим бабайға. Мин ерҙә бер ниндәй эҙ ҙә күрмәйем, ә ул, һыуһарҙың эҙенә төштөк, ти. Ул кар өҫтөндә яткан кыу сыбыкты эйелеп карай, шунан ағас башынан төшкән кар киҫәгенә иғтибар итә. Шулар буйынса ағастан-ағаска һикереп киткән һыуһарҙы юллата бирә. Бәләкәс кенә аклан ситендәге ағас төбөнә еткәс, мин уның яңылышмауын күрҙем. Һыуһар ағастан төшкән дә ырғый-һикерә аклан аша сығып киткән.

— Таң аткас кына үткән,— ти Әбделнәғим бабай,— төнгө һунарҙан кайткандыр инде.

Акланды аша сығып күп тә барманык, һыуһарҙың эҙе бер түңгәк төбөндә ғәйеп булды.

— Кар аҫтында бына ошо түңгәк олоно ятырға тейеш,— тип фараз итә бабайым.— һыуһарҙың төйәге, моғайын, шундалыр. Карҙы каҙырға тура килә, улым.

Ул һырмаһын сисеп ырғыта ла түңгәк төбөндәге карҙы көрәргә тотона. Бер аҙҙан мин, ысынлап та, кар аҫтында яткан йыуан имән киҫкәһен күрәм.

Көрәгенең һабы менән карҙы төрткөләп, киҫкәнең ике осон да табып, уның осона әйбер тығып куйғас, шул киҫкәнең урта тәңгәлендәге карҙы астык.

Бабайым асалы ағас кыркып алды ла шул тирәнән киҫкәне тумыра башланы. Унда кыуыш эсенә әлеге алған ағасты тығырлык бәләкәй генә тишек яһаны. Үҙе Киҫкә кыуышында һыуһар тегеләй-былай йүгергеләй башлаһа, үтеп барғанда муйынынан кыҫыу өсөн, әлеге асалы ағасын тишек тәңгәленән туралай. Эргәһенә килһәм, асалы ағас менән муйынынан кыҫылған һыуһарҙың киҫкә эсендә тыпырсынғанын күреп, аптырап калдым.

Һыуһарҙы кыуышынан тартып алғас, Әбделнәғим бабай, уның койроғонан күтәреп, йылкылдап торған йөндәрен яланкул һыпырғылап караны ла: «Һыуһарҙың йөнөнә бал, балауыҙ йәбешеп калған. Тимәк, ул бөгөн берәй Кейек корттоң балын ашап кайткан. Киттек, әҙерлән»,—тине.

Бая осраған йүкә төбөнә еткәс, Әбделнәғим бабайҙың тәжрибәле күҙҙәре бер ботак төбөндәге тишекте шәйләп алды. Шунан балта төйҙәһе менән ағаска һукты ла колағын олонға терәне. Мин дә тыңлап караным. Йүкә ағасы эсендә тоноҡ кына бер геүләү ишетелә. Икенсе көн килеп әлеге йүкәне йығып караһаҡ, эсе тулы бал. Тапкан бал биш бот самаһы булыр. Бына бит, бал ашап, татлы тамак булып кына йөрөгән һыуһар беҙҙе нисек балға байытты.

Н. Мусин.

8- се класс өсөн инша темалары:

1.”Халҡыбыҙҙың боронғо йырҙары- атай-олатайҙар мираҫы”
2. “Матурлыҡҡа һоҡлана ла бел, уны ҡәҙерләй ҙә бел”
3.”Өр- яңы йыл килә”
4.”Алтын ҡуллы…”
5.”Яратҡан әҙәби геройым”
6.”Ил яҙмышы- ир яҙмышы”

9-сы класс өсөн диктант һәм изложение текстары

Контроль диктант.
Әйле ырыуы.

Имеш, бер заман Әй йылғаһы буйында көн иткән Биксәнтәй исемле башҡорт ҡартының малдары юғала. Шуларҙы эҙләргә ҡарт улын сығарып ебәрә. Улы, малдарҙы эҙләп йөрөй торғас, Урал һыртының арғы яғына барып сыға. Малдарҙы табып, атаһына әйләнеп ҡайтҡас:
— Унда бер ниндәй ҙә ғәскәр-фәлән юҡ, ерҙәре лә бик яҡшы, тигеҙ ер. Әйҙә, атай, шул ергә күсеп ултырайыҡ, — тип өгөтләй башлай. Ә бығаса башҡорттар: «Урал аръяғында ер юҡ, донъя шунда барып бөтә икән», — тип йөрөр булғандар.
Биксәнтәй ҡарт: «Бәй, былай булғас, Урал аръяғында ла донъя көтөп булырҙай ҙа баһа», — тип туған-тыумасалары менән кәңәш-төңәш итешә лә был яҡҡа күсенеп ултыра.
Уның ун ике улы була. Ун икеһе лә башлы-күҙле булғас, төрлөһө төрлө ерҙә урын һайлап, һәр береһе үҙ донъяһын ҡороп ебәрә. Шулай итеп ун ике ауыл таралып китә: Мәтәле, Үләнде, Оло Ҡарағайгүл, Субраш, Собханғол, Кескәй Ҡарағайгүл, Морат, Ҡомсүл, Оло Олторак, Кескәй Олторак, Бөтөк, Ҡужа. Быларҙың бөтәһен дә әйлеләр тип йөрөтәләр. (Халыҡ ижадынан.)

Аңлатмалы диктант
Иң ҡәҙерле бүләк

Гөлбикә йыуынып, сәсен тарап алды ла әсәһе шыж-быж килеп бешеренгән түрбашҡа сыға һалды. Ә унда, өҫтәлдә, тау-тау өйөлгән ашамлыҡ! Йәнең ни теләй, бөтәһе лә бар. Ул алма, ҡорот, бауырһаҡ тиһеңме, сейә ҡайнатмаһы, йомортҡа, ҡаҡлаған ит, балан ҡағы...
— Был ҡаҡты түбән ос Әминә инәйең индереп китте. «Ошоно ашаһа, тыуған яҡтары иҫенә төшөр», — тине, ә бына был банкала Ғәфиәт бабайың төнә ҡалдырған бал. «Үҙебеҙҙең урман-болондарҙы хәтеренән сығармаһын, — тине, — һалдат әсән тыуып үҫкән ер — иң ҡәҙерлеһе бит ул».
Ошо һүҙҙәрҙән һуң Гөлбикә:
— Мин хәҙер... — тип урамға йүгерҙе.
Бер аҙ ваҡыт үтте. Мәрфуға апай, сәстәрен елдә туҙғытып, ҡолонсаҡтай уйнаҡлап ҡайтып килгән Гөлбикәне күрҙе. Гөлбикә тәүҙә әсәһен ҡосаҡлап алды, унан:
— Әсәй, иң ҡәҙерле бүләк минең ҡулымда! — тип, өҫтәлгә сигеүле кисет һалды.
— Быны Хәлимә инәй бирҙе. Урал ағайыма сәләм яҙырға ҡушты. Кисет эсендә тупраҡ. Уны ла Хәлимә инәй һалды. «Һалдат кешегә ошонан да ҡәҙерлерәк бүләк юҡ ул», — тине. Шулаймы, әсәй?
- Шулай, үҫкәнем, бик дөрөҫ. Донъяла , ысынлап та, тыуған тупрактан да изгерәк нәмә юҡ ул.(Д. Бүләков)

Контроль диктант.
Салауат Юлаев.

Салауат Юлаев башҡорт халҡының тарихында иң бөйөк, айырыуса дан һәм бөтмәс- төкәнмәс мөхәббәт ҡаҙанған шәхестәребеҙҙең береһе, батырлыҡ һәм ил мәнфәғәтенә тоғролоҡ өлгөһө, башҡорт милләтенең рухи ҡаһарманлыҡ символы. Милли герой, 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышының полководецы, шағир- импровизатор. Кешелек донъяһында милли-азатлыҡ хәрәкәттәренең һоланғыс етәкселәренең береһе.

Әлбиттә, Салауат хаҡында һөйләгәндә, ниндәй генә эпитеттар ҡулланһаң да, аҙ һымаҡ. Фәндә, әҙәбиәттә, сәнғәттә Салауат темаһы һис ваҡыт тамамланмаҫ илаһи бер темаға әйләнде. Уның хаҡында яҙылған әҫәрҙәр һәм хеҙмәттәр бихисап. Уның исемен, уның образын башҡорт халҡы үҙ ижадында эпос геройҙарына тиң булырҙай бейеклектәргә күтәрҙе. Милләтебеҙ символы — дәһшәтле һыбайлы Салауат һыны тарихыбыҙҙың яңы боролошонда Башҡортостан Республикаһының Дәүләт гербында урын алып, инде тотош бер илдең ырыҫ, ҡот билдәһенә әйләнде. Салауат исеме беҙҙең әсән икһеҙ-сикһеҙ ғорурлыҡ, рухи күтәренкелек сығанағы, ул һәр ваҡыт беҙҙе әйҙәп тороусы көс, ул башҡорттоң ҡайнар йөрәк тибеше, мәңге һүнмәҫ һәм һүрелмәҫ азатлыҡ рухы. *(Р. Шәкүр.)*

Өйрәтеү изложениеһы.
Тымыҙыҡ иртә.

Йәйҙең, миҙгел түбәһенә үрләп, йәйрәп балҡыған көндәре. Тымыҙыҡ иртә. Шаңдаҡ аҡһылланып, алыҫтағы тау теҙмәләре артынан ҡояш күренеүгә, Күккүл өҫтөндә, алтын да көмөш тәңкә һибелгән төҫлө, иренсәк шөҙөр йымылдап уйнай башланы. Таң ысығы дымһыратҡан япраҡтарҙан гәлсәр тамсылар тама, тертләп уянып, сәскәләр асыла, беленер-беленмәҫ елдән урман талғын ғына бәүелеп ҡуя.

Ун йылдан артыҡ инде йәйҙәрен һәр иртәлә ошо мөһабәт күренеште таң ҡалып күҙәтә Мансур. Һынаған кеүек йотлоғоп баға, һоҡлана, ә барыбер танһығы ҡанмай. Күргән һайын зауығы, ҡомары арта, нығклап ҡараған һайын, урман-тау донъяһының яңы биҙәктәрен табып, хозурлыҡ кисерә.

Бына ул, күкрәген һаумалдай саф, йомшаҡ елгә ҡуйып, бер килке йылмайып торҙо ла, яй ғына атлап, ҡая өҫтөнә менде. Күҙенә бинокль ҡуйҙы, алыҫ-алыҫтарға тартылған күгелйем зәңгәр киңлектәрҙе һынсыл барлап сыҡты.

Шөкөр, хәүефләнер бер ни ҙә юҡ, хәҙергә. Ҡайһы тарафҡа күҙ һалма, шыйыҡ томанға төрөнгән йөҙйәшәр урман, үҙенен шифалы һулышынан үҙе рәхәт сигеп, тын ғына ойоп ултыра. Шылт иткән тауыш ишетелмәй. Хатта таң мәлендә кем уҙарҙан сутылдап һайрашҡан ҡоштар тынып ҡалған.

Һил тәбиғәт Мансурҙың борсоулыраҡ төнгө уйҙарын һыпырып ташланы. Хәҙер һәр көнгө йомоштарына тотоноп китһә лә, моғайын, таман булыр. *(Ә. Хәкимов.)*

Контроль изложение.
Ҡәнифә юлы

Үҙебеҙҙең Урал тауҙарында Ҡәнифә юлы тигән бик оҙон бер юл бар. Ул Һаҡмарҙың үрге яғында башлана ла Урал һырттарының береһе буйлап төшлөккә табан китә. Гел тау баштарынан, иң ҡалҡыу урындар аша алыҫтарға бара-бара ла, ахыр сиктә, юл Ырымбур далаларына төшөп юғала икән...

Кем булған ул Ҡәнифә? Юлға үҙ исемен ҡалдырып, халҡыбыҙҙың мәңгелек хәтеренә ул нисек инеп ҡалған, легендаларҙа тамырланырлыҡ ниндәй дан ҡаҙанған?

...Башҡорттарҙың йәмле бер йәйләүенә йәшеренеп кенә ҡаҙаҡтар яҡынлаша ла Ҡәнифә исемле бер бик һылыу ҡыҙҙы урлап ҡасалар. Йәйләү эргәһендә йөрөгән йылҡы өйөрөн дә ҡыуып алып китә улар. Алыҫтағы далаларына алып ҡайтып, ҡаҙаҡтар Ҡәнифәне үҙҙәренең бер батырына көсләп кейәүгә бирә. Әммә Ҡәнифә ерһенмәй, тыуған илен һағына, нисек кенә булһа ла ҡасып ҡайтып китеү яғын көнө-төнө уйлап йөрөй. Тик ҡайһы яҡҡа ҡасырға, нисек юл табырға? Ҡаҙаҡ далаларына килеп сыҡҡан бер башҡорт ҡарты, Ҡәнифәнең аһ-зарын ишетеп, күҙ-йәшен күреп, уға сер итеп кенә юл өйрәтә. Бер ҡыш үтеп, яҙғы ташҡындар ҡайта төшкәс, Ҡәнифә ҡасыр юлына сыға. Һыбаймы, йәйәүләпме, үҙҙәренең йәйләүҙәренән килгән йылҡыларҙы ла үҙе менән ҡыуып алып китә. Төньяҡҡа табан ҡаса-боҫа күп көндәр, күп төндәр барырға тура килә уға. Тыуған яҡтарына, ҡалҡыу ерҙәргә яҡынлаша башлағас, берене артынан берене теҙелеп киткән тауҙар һыртына менеп ала ул. Тәпәш ерҙәрҙә әле бысраҡ, батҡаҡлы булғанға күрә, тау юлы бик уңайлы булып сыға, унда ҡоро ла, йәшел үлән дә күпереп шыта башлаған, йәшеренәм тиһәң -урмандар ҙа бар, ашарыңа — йыуа үҫә, шишмәләр ҙә етерлек... Тауҙар һыртынан т,уп-тураға, юлһыҙ ерҙән юл ярып, Ҡәнифә тағын оҙаҡ ҡына бара һәм, малдарын ҡыуа-ҡыуа, ахыр сиктә, үҙ ырыуы йәшәгән төбәккә килеп сыға.

Сәсәндәр телендә был ябай ғына хикәйәт мең төрлө күренештәр, ваҡиғалар менән биҙәкләнә. Ҡәнифәне йә ҡаҙаҡтар баҫтыра, йә ул, ат өҫтөндә сабып килеп, киң даръяға ташлана. йә Ҡәнифә, тыуған еренең тәүге сәскәләрен күреп, ҡыуанысынан илап та, йырлап та ебәрә. Ҡәнифә бөтә ҡаршылыҡтарҙы, ҡыйынлыҡтарҙы еңеп сыға, үҙ иленең шишмәләре уға к ог бирә, ҡара төндәрҙә Тимерғаҙыҡ йондоҙо уға юл күрһәтә.

Был юл буйлап елдереп үткән һайын шундай уй кил»! Ҡәнифәнең юлы һаман таҡыр ҡалыр ҙа бит, тик уның исемен, уның тураһындағы хәтирәләрҙе, иҫтәлектәрҙе ниндәй яҙмыш көтә? Халыҡ әгәр үҙенең тарихын һанға һуҡмай башлаһа, ата бабаларының изге васыяттарын онотһа, быуаттар буйы туплв нып килгән уй-фекерҙәренең, күңел хазиналарының сүп-сарға әйләнеүенә юл ҡуйһа, тәбиғәткә үрелеп үҫкән моңдарынан, йырҙарынан баш тартһа, туған телен ташлаһа — ул саҡта Ҡәнифәнең дә бер кемгә лә кәрәге булмай сыға.

Халыҡ хәтерендә эҙең өҙөлмәһен, мәңге йәшә, сая Ҡәнифә! *(Б. Мәһәҙиевтән.)*

9-сы класс өсөн инша темалары:

1. “ Әсәм теле – сәсән теле”
2. “Мин тыуған яғымды ни өсөн яратам?”
3. “Йәйге кис”
4. “Кешене эше данлай”

Рәсми эш ҡағыҙҙары, хат, көндәлек яҙыу.

Филиал муниципального общеобразовательного бюджетного учреждения средняя общеобразовательная школа №2 с. Кармаскалы муниципального района Кармаскалинский район Республики Башкортостан
средняя общеобразовательная школа д.Старобабичево

РАССМОТРЕНО	СОГЛАСОВАНО	УТВЕРЖДАЮ
на заседании ШМО	Заведующий филиалом	Директор школы
/Абдуллин А.Н./	/Абдуллин Р.Ф. /	Климкин М.Н./
Протокол № 1 от 27.08.2015 г.	28.08.2015 г.	Приказ № 130 от 29.08.2015 г.

Календарно- тематическое планирование

по башкирскому языку

класс 8

на 2015-2016 учебный год

Количество часов 70

Составитель Абдуллина Л. Ш.

д.Старобабичево
2015

Башҡортостан Республикаһы
Ҡырмыҫҡалы районы муниципаль район
2- һанлы Ҡырмыҫҡалы муниципаль дөйөм белем биреү бюджет учреждениеһы
урта дөйөм белем биреү мәктәбенең филиалы
Иҫке Бәпес урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Ҡаралған	Килешелгән	Раҫлайым
ММБ ултырышында	Филиал етәксеһе	Мәктәп директоры
/Абдуллин А.Н./	/Абдуллин Р.Ф. /	/Климкин М.Н./
Протокол № 1 27.08.2015 й.	28.08.2015 й.	Бойорок №130 29.08.2015 й.

Башҡорт теленән

2015-2016 уҡыу йылына

календарь- тематик план

8-се класс

Сәғәт һаны 70

Төҙөүсеһе Абдуллина Л. Ш.

Иҫке Бәпес ауылы
2015

№	Темалар	дата		иҫкәрмә
		план-лашты-рылған	үтәлеү ваҡыты	
1	Синтаксис.” Ябай һөйләм” темаһын ҡабатлау.	04.09.15		
2	Синтаксис . Ике составлы һөйләмдәрҙе ҡабатлау.	08.09.15		
3	Айырымланған эйәрсән киҫәкле һөйләмдәрҙе ҡабатлау.	11.09.15		
4	Контроль диктант.”Яугир менән ат”	15.09.15		
5	Хаталар өҫтөндә эш. Тиң киҫәкле һөйләмдәрҙе ҡабатлау.	18.09.15		
6	Ҡушма һөйләм.	22.09.15		
7	Ҡушма һөйләм тураһында үтелгәндәрҙе ҡабатлау.	25.09.15		
8	БТҮ Контроль изложение “Аҡһаҡ Тимер ”.	29.09.15		
9	Ҡушма һөйләм тураһында дөйөм төшөнсә.	02.10.15		
10	Теҙмә ҡушма һөйләм.	06.10.15		
11	Теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙең бәйләнеше.	09.10.15		
12	Теҙмә ҡушма һөйләм төрҙәре.	13.10.15		
13	БТҮ.Контроль инша “Халҡыбыҙҙың боронғо йырҙары-атай-олатайҙар мираҫы”.	16.10.15		
14	Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәр.	20.10.15		
15	Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.	23.10.15		
16	Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә өтөрҙәр ҡуйылышы.	27.10.15.		
17	БТҮ.Өйрәтеү иншаһы “Матурлыҡҡа һоҡлана ла бел, уны һаҡлай ҙа бел”.	30.10.15		
18	Теркәүеслеҙ теҙмә ҡушма һөйләм.	06.11.15		
19	Теркәүеслеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.	10.11.15		
20	Теркәүеслеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә һыҙыҡ ҡуйылыу осраҡтары.	13.11.15		
21	Теркәүеслеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә нөктәле өтөр.	17.11.15		
22	Биремле диктант.” Әсәйем юлға сыға”	20.11.15		
23	Хаталар өҫтөндә эш. Эйәртеүле	24.11.15		

	ҡушма һөйләм.			
24	Баш һәм эйәрсән һөйләм.	27.11.15		
25	БТҮ Өйрәтеү изложениеһы “Батырҙың бала сағы”.	01.12.15		
26	Эйәрсән һөйләмдең баш һөйләмгә эйәреү саралары.	04.12.15		
27	Тыныш билдәләре.	08.12.15		
28	Өтөр, ике нөктә ҡуйылышы.	11.12.15		
29	Һайланма диктант.” Ат яратыу”.	15.12.15		
30	Хаталар өҫтөндә эш. БТҮӨйрәтеү иншаһы “Өр-яңы йыл килә”	18.12.15		
31	Эйәрсән һөйләм төрҙәре.Эйә һөйләм.	22.12.15		
32	Эйәрсән хәбәр һөйләм.	25.12.15		
33	Эйәрсән хәбәр һөйләмдә тыныш билдәләре.	29.12.15		
34	Аныҡлаусы һөйләм.	15.01.16		
35	БТҮ Өйрәтеү изложениеһы ”Ысын дуҫлыҡ”.	19.01.16		
36	Тултырыусы һөйләм.	22.01.16		
37	Тултырыусы һөйләмдә тыныш билдәләре.	26.01.16		
38	БТҮ Өйрәтеү иншаһы “Алтын ҡуллы…”	29.01.16		
39	Хәл һөйләмдәр. Ваҡыт һөйләм	02.02.16		
40	Урын һөйләм	05.02.16		
41	Аңлатмалы диктант”Мәшәҡәтле көндәр”.	09.02.16		
42	Хаталар өҫтөндә эш. Рәүеш һөйләм	12.02.16		
43	Күләм –дәрәжә һөйләм	16.02.16		
44	Сәбәп һөйләм	19.02.16		
45	БТҮ Өйрәтеү изложение “Минең Рәис дуҫым”	26.02.16		
46	Маҡсат һөйләм	01.03.16		
47	Шарт һөйләм	04.03.16		
48	Шарт һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.	11.03.16		
49	Иҫкәртмәле диктант “Яҙ башланды”.	15.03.16		
50	Хаталар өҫтөндә эш . Кире һөйләм	18.03.16		
51	Эйәрсән һөйләм төрҙәрен ҡабатлау.	22.03.16		
52	Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр.	05.04.16		
53	БТҮ Өйрәтеү иншаһы “Яратҡан әҙәби геройым”	08.04.16		
54	Күп эйәрсәнле ҡушма	12.04.16		

	һөйләмдәр.			
55	Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.	15.04.16		
56	БТҮ Өйрәтеү изложениеһы “Урман бабай”	19.04.16		
57	Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр	22.04.16		
58	Уларҙың стилистик роле.	26.04.16		
59	Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре	29.04.16		
60	Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәрҙә нөктәле өтөрҙөң ҡуйылышы.	03.05.16		
61	Контроль диктант “Күңелле ине ул сактар”.	06.05.16		
62	Хаталар өҫтөндә эш. Теҙемдәр	10.05.16		
63	БТҮ.Контроль изложение “Һунарға барыу”	13.05.16		
64	Һөйләм аҙағындағы тыныш билдәләре.	17.05.16		
65	БТҮ Контроль инша ”Ил яҙмышы - ир яҙмышы”.	20.05.16		
66	Нөктәле өтөр, һыҙыҡ ҡуйылыу осраҡтары.	24.05.16		
67	Эш ҡағыҙы яҙып өйрәнеү.	27.05.16		
68	Ике нөктә ҡуйылыу осраҡтары.	31.05.16		
69	“Ҡушма һөйләм “ ҡабатлау.			резерв дәрес
70	V- VIII кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау.			резерв дәрес

Филиал муниципального общеобразовательного бюджетного учреждения средняя общеобразовательная школа №2 с. Кармаскалы муниципального района Кармаскалинский район Республики Башкортостан
средняя общеобразовательная школа д.Старобабичево

РАССМОТРЕНО	СОГЛАСОВАНО	УТВЕРЖДАЮ
на заседании ШМО	Заведующий филиалом	Директор школы
_____	_____	_____
/Абдуллин А.Н./	/Абдуллин Р.Ф. /	/Климкин М.Н./
Протокол № 1 от 27.08.2015 г.	28.08.2015 г.	Приказ № 130 от 29.08.2015 г.

Календарно- тематическое планирование

по башкирскому языку

класс 9

на 2015-2016 учебный год

Количество часов 34

Составитель Абдуллина Л. Ш.

д.Старобабичево
2015

Башҡортостан Республикаһы
Ҡырмыҫҡалы районы муниципаль район
2- һанлы Ҡырмыҫҡалы муниципаль дөйөм белем биреү бюджет учреждениеһы
урта дөйөм белем биреү мәктәбенең филиалы
Иҫке Бәпес урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Ҡаралған ММБ ултырышында	Килешелгән Филиал етәксеһе	Раслайым Мәктәп директоры
/Абдуллин А.Н./	/Абдуллин Р.Ф. /	/Климкин М.Н./
Протокол № 1 27.08.2015 й.	28.08.2015 й.	Бойорок №130 29.08.2015 й.

Башҡорт теленән

2015-2016 уҡыу йылына

календарь- тематик план

9-сы класс

Сәғәт һаны 34

Төҙөүсеһе Абдуллина Л. Ш.

Иҫке Бәпес ауылы
2015

№	Темалар	дата		
		Планлаш тырылған	үтәлеү ваҡыты	иҫкәрмә
1	Тел тураһында дөйөм төшөнсә	08.09.15		
2	Контроль диктант”Әйле ырыуы”.	15.09.15		
3	Хаталар өҫтөндә эш.Әҙәби тел һәм диалект.	22.09.15		
4	Ике теллелек.	29.09.15		
5	БТҮ Контроль инша“Әсәм теле- сәсән теле”	06.10.15		
6	Башҡорт теленең стилдәре. Функциональ стилдәр.	13.10.15		
7	Йәнле һөйләү стиле.	20.10.15		
8	Матур әҙәбиәт стиле.	27.10.15		
9	Фәнни стиль.	10.11.15		
10	Публицистик стиль.	17.11.15		
11	БТҮ.Өйрәтеү иншаһы “ Мин тыуған яғымды ни өсөн яратам?”	24.11.15		
12	Рәсми эш ҡағыҙҙары стиле.	01.12.15		
13	Хаттар стиле.	08.12.15		
14	Һүрәтләү саралары. Эпитет.	15.12.15		
15	БТҮӨйрәтеү изложениеһы “Тымыҙыҡ иртә”	22.12.15		
16	Сағыштырыу.	29.12.15		
17	Метафора.	19.01.16		
18	Синонимдар һәм уларҙы телмәрҙә ҡулланыу.	26.01.16		
19	БТҮ Өйрәтеү иншаһы ”Йәйге кис”	02.02.16		
20	Грамматик синоним.	09.02.16		
21	Тасуирлауҙа антитезаны файҙаланыу.	16.02.16		
22	Һүҙҙе һәм уның формаларын телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу.	01.03.16		
23	БТҮ Контроль изложение ”Ҡәнифә юлы ”.	15.03.16.		
24	V- IX кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Фонетика.	22.03.16		

25	Орфоэпия. Орфография.	05.04.16		
26	Аңлатмалы диктант “Иң ҡәҙерле бүләк”.	12.04.16		
27	Хаталар өҫтөндә эш. Лексика.	19.04.16		
28	БТҮ Контроль инша “ Кешене эше данлай”	26.04.16		
29	Башҡорт теленең һүҙлектәре.	03.05.16		
30	Һүҙьяһалыш.	10.05.16		
31	Контроль диктант “Салауат Юлаев”.	17.05.16		
32	Хаталар өҫтөндә эш. Морфология.	24.05.16		
33	Синтаксис һәм пунктуация			резерв дәрес
34	Ҡушма һөйләмдең төрҙәре.			резерв дәрес